

*Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА*

# ҠАЙЫП ДЕҮӘРӘН

*1812-1814 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Рәсәй тип, Илем тип башын һалған башҡорт яугирҙәренең яҡты иҫтәлегенә арнайым.*

Тарих мең дә туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан икенсе йылда Дәүләкән районы Дүртөйлө ауылында бер көлкөлө лаҡап ишеткәйнем: «Ике ир сабын ер өсөн бәхәсләшеп китә лә бер-береһен төртә башлай.

— Һин ипләп, мин деүәрән нәҫеле! — ти береһе.

— Һин деүәрән булмағайы, әллә кем бул — минең яланға теймә! — тип, икенсеһе ал бирмәй икән».

Бәхәс ни менән бөткәндер... Әммә «Кем һуң ул деүәрән нәҫеле? Кемдәр улар?» тигән һорау тынғы бирмәй. «Аҡыл кәрәк булһа, деүәрәндән һора», тигәнде лә Әлшәй яғы Дим буйы башҡорттарында йыш ишетергә тура килә.

1812 йылғы рус-француз яуында ҡаһармանлыҡ күрһәткән башҡорт яугирҙәренә Рәсәй батшаһы махсус дәрәжәле исем — дворянлыҡ дәрәжәһе бирә. Деүәрән (дворян) нәҫеле — шундай Грамота алған батыр башҡорт нәҫеле ул.

Деүәрәнлек тамырҙары 1812 йылғы тарихи мәлдәргә генә ҡайтып ҡалмай, ә башҡорт аҫылдарының, батырҙарының милләт үҫешендә тарихи урынын, вазифаһын рәсми сәйәсәт билдәләүенә лә бәйле. Фәҡәт ҡаһарман яугир, тәрән зиһенле, аҡыллы, сабыр холоҡло һәм ярһыу йөрәкле башҡорт лайыҡ булғандыр был дәрәжәгә.

Ошо уйым тыуған ауылыма исеме тороп ҡалған ир батыры Ҡайып бабай тураһында яҙырға ниәт бирҙе. Әлшәй районындағы Яңы Сәпәш исемле ауылдың тәү исеме — Яңы Ҡайып.

Кем булған һуң ул Ҡайып? Картинәйем Ғәрифәнең «деүәрән Ҡайып» тигәне ҡолаҡ осомда тороп ҡалған...

Тарихи документтарға мөрәжәғәт итеү шуны күрһәтә: Ҡайып Баянов — 1812 йылғы Ватан һуғышындағы 2-се Башҡорт полкы подпоручигы, 4-се дәрәжәләге Изге Анна ордены[1] кавалеры. Рәсәй императоры Александр I тарафынан бындай ырыҫлы таныу билдәһе эйәһенә бик һуң ғына, 1819 йылдың йәйендә генә килә.

Һөйөнсө хәбәрҙе Шланлыкүл тип аталған 12-се башҡорт кантон идараһынан еткерәләр. Шатлыҡтан Ҡайып Баянов ырыу ҡорон йыя, кәңәш мәжлесе ҡора. Аҡ тирмә түрендә Ҡайыптың бер туған ағалары Сурабай, уң ҡулынан — походный старшина, дистанционный начальник Ғәли, унның янында Әйүп старшина үҙе. Ә һул яғынан йола буйынса буш урын ҡалдырыла —

француз яуында һәләк булған дуҫы старшина Хәлил хөрмәтенә ул. Артабан дистанционный начальник Айыт ултыра. Алты көндән ырыу йыйыны йыйырға тип ҡарар итеlә. Төрлө яҡтан килгән ҡунаҡтар, Ҡайыптың яу дуҫтары, ауыл халҡы йыйылған майҙан бал ҡорто күселәй гөж килә, күңелдәр шат, күтәренке...

Француз яуында иҫ китерлек батырлыҡтар күрһәткән старшина Ҡайыповтың Александр I тарафынан IV дәрәжәле Изге Анна ордены менән бүләкләнеүе оло майҙанға иғлан ителә. Бына ул бүләкләү тураһындағы документ:

*«Божию милостью Мы, Александр Первый, император и Самодержец Всероссийской и прочая, и прочая,и прочая по нашему походному старшина 2-го Башкирского полка пятисотенного старшины Акчульпанова помошнику Каипову.*

*В воздании ревностной службы Вашей и отличия, оказанного в компании противу французских войск 1812 года, а особенно в 15 день июля при разбитии саксонских войск 1812 г. под городом Кобриком, где вы с подчиненными своими содействовали храбростью к поражению неприятеля во время общего нашего удара, Всемилостивейшее пожаловали Мы Вам в 23 день августа 1812 года:*

*Кавалером ордена Св. Анны четвертой степени;*

*Грамоту сию, свидетельство подписать, орденскою печатью утвердить и знаки орденские преподнести вам Указом Нашим в 3 день мая 1817 года повелели мы.*

*Капитулу российских императорских орденов дана а Санкт-Петербург в 31 день марта 1818 года.*

*Подписали: за отсутствием канцлера, действительный тайный советник 1-го класса*

*Князь Лопухин подпись*

*Орденский казначей, генерал-майор Крыжановский подпись*

*печать*

*С подлинным верно*
*кантонский начальник*
*сотник Сыртланов»*[2].

Был маҡтау билдәһен тантаналы ҡабул итер өсөн дәрәжәтле рәсми яу кейемен (мундирын) кейеп майҙан түрендә торған Әйүп баба Ҡайыповтың һыны башҡорт рухына, горурлығына мәртәбә булғандыр ул көн...

Батша фарманы уҡылғас, 2-се Башҡорт полкының командиры Аралбай Аҡсулпанов Әйүп Ҡайыптың күкрәгенә орден ҡаҙай, ә орден таҫмаһын уң яҡ яурынына һалып ҡуя. Бар изге эшкә фатиха ҡылып мулла Мөхәмәтрәхим Монасипов бата уҡый.

Ҡайыптың тулы исеме — Әйүп Ҡайып Баянов. Ҡайып — уның атаһының, ә Баян — ҡартатаһының исеме[3].

Майҙанда булған яу уйындары, көрәш, күңел асыуҙарҙан һуң Әйүп тирмәлә яҡын дуҫтарына оло хөрмәт күрһәтә. Бына уның яҡын дуҫтары: Аралбай Күсәрбай улы Аҡсулпанов — 2-се Башҡорт полкы командиры (Стәрлетамаҡ Күсәрбайы ауылынан), уның менән яу йөрөгән казактар: Абдулла Булатов, Дәүләтбай Исламшин (Мораҡтан), Дәүләткилде Йомағужин, Ғүмәр Юлдашев, Алсынбай Ҡасҡынов (Аллағыуат ауылы); Ильяс Юлдашев (Әлшәй ауылы), Күҙәмеш Яҡшығолов (Сураҡай ауылы), Ҡаҙанғолдан (Дәүләкән районы) Рәхмәтулла Хәмзин, Аҡколайҙан (хәҙер Әлшәй районы) сотник Теләүкәй Килмөхәмәтов, Ҡыпсаҡ-Асҡарҙан Яхъя Килдеғолов, Әбдрәшиттән есаул Ниғмәтулла Ғәбиҙуллин, Кәпәй-Ҡобау ауылынан казак Боҫҡон Ишҡолов... Уларҙың затлы исем-шәрифтәре ташҡа баҫылып архивтарҙа һаҡлана[4]. Ватан һуғышында Рәсәй тип йән аямай, башҡорт ырыҫын, исем-бәҫен төшөрмәй арыҫландай алышҡан яугирҙәребеҙҙең әруахтарының йәндәре йәннәттә, гүрҙәре яҡтыла булһын...

Әйүп Ҡайыповҡа тағы ла яуаплыраҡ вазифа — старшиналыҡ йөкмәтелә. Батша алдында ла, ил алдында ла яуаплы эш башлана.

1823 йыл ҡышында Әйүп Ҡайыпов Ырымбур ҡалаһына губернаның Дворян йыйылышына саҡырыла. Был йыйылышта уға ифрат ҙур әһәмиәткә эйә булған, уның оло шатлығының вә оло вазифа, абруйының да, шулай уҡ бәлә-ҡаза, ҡайғыларының да сәбәбе булған тарихи документ тапшырыла. Ғәзиз ерҙә тыуып, ата-бабаһы зыяраттарын

бағып, ер-һыу байлығын, халҡын үҙ балаһындай бәҫләп торған кешене генә ер хужаһы итеп таныуҙы рәсмиләштергән, аҫабалыҡты нығытҡан документ була ул. Ә аҫабалыҡ — ерҙе ситкә, йәиһә һоноլған, ынтылған берәүгә әләф-тәләф иттермәй һаҡлауға хоҡуҡ дворяндеүәрән исеме менән батша хөкүмәте тарафынан нығытыла. Рус мөхитендә лә дворян ошондай уҡ мәғәнәгә эйә. Бына ошо документ:

*«Грамота*

*Оренбургской губернии от Губернского Предводителя дворянства и уездных дворян, наших депутатов, собранных для составления Дворянской родословной книги, данная Дворянину подпоручику и Кавалеру Аюпу Каюпову.*

*Рассмотрев на основании Всемилостивейшие от 1785 года апреля 21 дня, Пожалованной 1801 года апреля 2 дня Высочайше утвержденный российскому дворянству Грамоты предъявленная от него Каипова о дворянском его достоинстве доказательства, признали оныя; согласными с предписанными на то правилами вследствие коих по силе семьдесят восьмой статьи, объявленной грамоты, Он и Род его внесен в дворянскую родословную Оренбургской губернии книгу, во вторую ея часть.*

*Во свидетельство чего мы: Губернский Предводитель дворянства, депутаты во исполнение Высочайшего Его Императорского Величества соизволения, дали Ему сию Грамоту за подписанием нашим, утвердив оную печатью дворянского собрания Оренбургской губернии февраля 14 дня 1823 года.*

*Подлинно подписали:*

*Оренбургской губернии Предводитель дворянства, коллежский советник Степан Мертваго*

*Бузулукского и Бугурусланского дворянства, депутат, колежский советник Петр Ефтюгин*

*Мензелинского и Бирского дворянства депутат, коллежский советник и кавалер Евгений Колокольцев*

*Бугульминского и Белебеевского дворянства депутат, майор и кавалер Иван Мальковский*

*Уфимского и Стерлитамакского дворянства депутат Иван Шильников*

*Дворянства секретарь, титулярный советник Курочкин*

*Верно с подлинника*

*Кантонный начальник, сотник Сыртланов»*[5]

Әйүп Ҡайыповтың һәм уның нәҫеленең (деүәрән) дворянлыҡ титулы тураһында был грамота беренсе тапҡыр баҫыла.

Шулай итеп, Ҡайып нәҫел-ырыуында шәхсән генә түгел, ә нәҫелдән булған дворян тамыры башлана.

12-се Башҡорт кантонлығында дворян титулына башҡорттарҙан фәҡәт ике кеше генә эйә булған. Береһе — Әйүп Ҡайыпов, икенсеһе Ноғайбәк улы Шәһипгәрәй Көрмәнәев[6] булыуы тураһында заманында сотник Сыртланов рапорт биргән.

Зирәк аҡыл менән эш иткән Сыртланов рапортҡа Әйүп Ҡайыптың Изге Анна ордены менән бүләкләнеү Грамотаһының, шулай уҡ Әйүп һәм уның бөтә зат-ырыуының Дворяндар нәҫеле китабына индерелеүен раҫлаған Грамотаның да күсермәләрен теркәп ҡалдырған. Был рапорт 1839 йылда эшләнеүе (был ваҡытта инде Әйүп Ҡайыпов гүр эйәһе) менән дә ир уҙаманы Сыртлановтың бәҫен күтәрә. Оло дәрәжәле ил улының исеме юғалмаһын өсөн ул барын эшләгән.

Әйүп Ҡайыпов ябай халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы, хәстәрләүсе, намыҫлы, яугирҙәргә хас тура һүҙле, рухлы кеше була. Шул сәбәптәндер, уны халыҡ та ярата, хәтерләй. Юғиһә, нисәмә йылдар үтеп, ауылым исеме ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәһен — халыҡ һаман Ҡайып ауылы тип һөйләй...

Халыҡ яратҡан кешене яратыу, үҙендән һәйбәтерәкте ярата алыу — көслө шәхестәр өлөшө. Кәм күңелле, тар эсле, урта ҡул һөнәрмән ул өлөштән мәхрүм. Халыҡты яҡлай белгәне, тура һүҙлелеге өсөн Әйүп Ҡайыповҡа ҡаршы ғәйбәт, янау һүҙе йөрөтөүселәр, Граждандар губернаторы О.Л.Дебу яҙыуынса, «неблагонамеренных ему людей»[7] төркөмө лә хасил була.

Тормоштоң үҙ ҡануңдары. Хоҙай тәғәлә Әйүп Ҡайыповты киң нәҫел, затлы тоҡом менән бүләкләй. Түл ҡотон һаҡлау, зат-ырыу тамыры өҙөлмәһен өсөн, яу-ҡырыу, ҡыр-

ғындарҙан милләт мәлйеп ҡалмаһын өсөн күп ҡатын алыу бик ныҡлы, көслө тамырлы йола булған. Әйүп Ҡайыповтың өс ҡатыны — Фазила, Хәҙисә, Зәләйхалар аҫыл иргә ете ул, дүрт ҡыҙ табып бирә.

Әйүп Ҡайыповтың тулы шәжәрәһен асыҡлау мөмкин түгел, сөнки IV, V, VI һәм X ревизия мәғлүмәттәре Ҡайып (Сәпәш, Хәлил) ауылы буйынса архивҡа килмәгән. Икенсенән, Әйүп Ҡайыптың зат-ырыуы Дворяндар китабына индерелеүе сәбәпле 1834 йылғы ревизия яҙмаларынан уларҙың исеме алып ташлана — «сей чиновник представя патенты на свое звание, иземлется из ревизской сказки»[8]. Шулай уҡ балалары Ҡусҡар, Ғүмәр, Усман, Лоҡман исемдәре янына шулай яҙыла: «Дети сеи, признанные Дворянским Собранием по отцу дворянами, иземлются из сказки»[9].

Һәр балаһының исем туйын, ғаилә шатлыҡтарын күтәреп, балаларына ырыҫлы тәрбиә, белем биреп йәшәгән ир муллаһы көнсөлгә көйөк, нәфрәт сәбәбе генә була шул.

1823 йылда ул суд-яньялға ылыҡтырыла, нахаҡ бәлә һәм ғәйбәт тағыла, старшиналыҡ вазифаһынан бушатыла. Был турала ул үҙе, яла яғыусы көнсөл Ш.Ноғайбәкте атап, Хәрби губернатор исеменә прошениеһында асыҡ итеп яҙа (архив документтарында аталған яманатлы фамилияларҙы күрһәтмәйем): «...полагаю, что прошение подано им (имя) на меня юртовым старшиною по поручению самого кантонного начальника, имевшего на меня личные недовольствия и ищущего случай завлечь меня на следствие, дабы я мог быть им очернен перед лицом Правительства... невинно отрешен я от должности старшины с поношением моей чести, для чего осмеливаюсь просить Ваше Сиятельство, несоизволено ли будет приказать кому следует о возведенном на меня извету, поручить сделать следствие и виновного в ложном составлении прошения предать действию Закона»[10].

Эй яҙмыш, хаҡ кешегә хаҡты иҫбат итер өсөн фәҡәт матур, батыр эштәргә генә мөмкинселек биреп торһаң икән дә бит! Алланан бирелгән хаҡ нур һине хаҡ эшең, түккән көсөң хаҡына матур билге менән билдәләүгә була — яманат ҡағылмаһын өсөн көрәш, үҙеңде аҡлау, иҫбатлау хәстәренән һиҫкәнәһең. Әммә икенсе хәҡиҡәт тә бар: «Алтынды нәжескә буяу менән нуры бөтмәй...» Ошо мәлдән башлап үҙ намыҫын, исеме, дәрәжәтенең саф сифатын ҡайтарыр өсөн Әйүп Ҡайыповтың оҙайлы көрәше башлана... Йәнә килеп, сәйер рәүештә бер-бер артлы 23 йәшлек улы Кәлимулла, 19 йәшлек Ҡусҡары үлеп китә (1824-1825 й.). Әммә хәлде йәш ҡатыны Зөләйха ҡотҡара: Сөләймән (1827), Ҡорманғол (1830), Шоғайып (1833) исемле малайҙар табып бирә.

Әйүп Ҡайыповтың прошениеһы губернатор исеменә бирелһә лә, уны махсус рәүештә граждандар губернаторына ебәрәләр. Был арала П.К. Эссен урынына П.П. Сухтелен тигән кеше губернатор итеп һайланған була, һәм ул әлегә Ҡайыповҡа яуыз ниәт йөрөтмәгән кеше булараҡ, бөтә мәлде ыңғай хәл итер ине. Быны белеп, ҡара ҡылығын ҡылыр кеше эште граждандар губернаторына ебәрә лә инде. Бөтә эҙәрлекләүҙәрҙең төбөндә ун йыл әүәл Әйүп Ҡайыповтың Ишбулды Ишҡолов тигән кешене (Бәләбәй өйәҙе Кәпәй-Ҡобау ауылы) нахаҡ бәлә яғыуҙан (ат урлауҙа ғәйепләү) ҡотҡарыу, яҡлау өсөн хөкөм эшенә ылыҡыуы[11]. Помещик Г.Моисеевтың мөлкәтенә ҡул һуҙыусы тип ғәйепләнгән[12] Ишбулды Ишҡолов француз яуында ҡатнашып көмөш миҙал алған Боҫҡон Ишҡоловтың — 13-сө Башҡорт полкы яугиренең бер туғаны. Ошо намыҫтан да Әйүп Ҡайыпов һынлы кеше бәләгә тарығанды яҡлар өсөн утҡа-һыуға инә. Тик башҡорт башын киҫкән яуыз кантон менән яман дуҫ, йәнә тар эсле үҙ башҡортоң бар бит әле... Бик күп хәрәм, яньял ҡуҙғатҡан был ҡатмарлы көрәш[13] бына ни менән тамамлана: «подпоручика Каипова за прикрывание оного преступления и неправо присвоения себе чужой совсем лошади лишить чинов и сослать в Сибирь на поселение»[14]... Бына нисек ... Буранбайҙың «Нахаҡ бәләләрҙе миңә тағып, Себер ебәрҙеләр күрә алмай» тигәне бер ир башынан ғына үтмәгән шул. Әйүп

Ҡайыповты яҡлаусынан ғәйепләнеүсегә әйләндереү өсөн, әлбиттә, мәкер ҡапҡаны алдан бик ныҡлы әҙерләнгән була. Тик тәрән аҡыл һәм белем эйәһе Әйүп Ҡайып үҙенең затлы башын буш бирергә торғандарҙан түгел. Хаҡлыҡ юллап Ырымбур Уголовный судына мөрәжәғәт итә һәм унан был киҫкен ҡарарҙы кире ҡағыуға ирешә, уға ҡаты киҫәтеү була, әммә шул уҡ ваҡыт йәнә хатта үҙенең урланған атын кире ҡайтарыу өлөшө лә тейә: «...Каипову сделать выговор с подтверждением ... причем лошадь гнедомухортого, буде еще невозвращена, возвратить Каипову»[15]. Көлөрһөң дә, иларһың да...

Бына ошо ун йыл элек булған хөкөм хәлдәре һәм унда Әйүптең еңеп сығыуы үс төйнәгәндәргә тынғы бирмәй. Старшина вазифаһынан төшөрөлөү сәбәпле граждандар губернаторына Ҡайыптың ярлыҡау һораған мөрәжәғәте 1832 йылдың 6 апрелендә булһа, 1834 йылдың аҙағында ғына ҡарала. Ул ваҡытта ла кеше намыҫын, йәнен бысраҡ итек менән тапағандай хөкөм сыға. Суд ҡарары махсус рәүештә үҙгәртелеп, хөкөмдарҙарҙа шик булһын өсөн Бәләбәй өйәҙе буйынса кантон начальнигы Шәһипгәрәй Ноғайбәк улы күрәләтә ялған мәғлүмәт бирә һәм исправник Соколов шуға нигеҙләнеп бына ниндәй рапорт яҙа: «... помянутый г. подпоручик Каипов в поведении известен мне с хорошей стороны, но будучи по суду наказан, по мнению моему не может возвратить прежнего места, на которое он домогается просьбою без заслуги особенной»[16].

Ил тип, Рәсәй тип йән аямай дошманына ҡаршы барған иргә Соколов «без заслуги» тигән мөһөр таға. Тик донъя ҡуласа бит ул, тәкәббергә лә бер килтереп биш баҫа. Бер-береһенә ҡаршылыҡлы документтарҙың мәғлүмәттәренә ышанмай, граждандар губернаторы О.Л. Дебу суд ҡарарын яңынан ҡарата[17] һәм тулы килеш, дүрт ҡултамғалы документ ала[18]. Улар нигеҙендә губернаторға докладная әҙерләнә. Һәм, ниһайәт, старшина Әйүп Ҡайыповтың вазифаһынан яңылыш төшөрөлгәне тураһында хәбәр ителә: «С отношения Уголовной Палаты видно, что подпоручик отрешен от должности по ошибке»[19]. Шул уҡ мәлдә О.Л. Дебу Әйүп Ҡайыповты үҙ вазифаһына кире ҡайтарыу өсөн башҡорт-мишәр ғәскәре командиры Циолковскийға прошение яҙа. Был хат 1835 йылдың 31 майында яҙылған[20]. Әммә Әйүп Ҡайыповтың хаҡ исеме аҡланған, тик пак кәүҙәһе генә күптән ер ҡуйынында була шул инде. Уның үле кәүҙәһен 1834 йылдың 19 сентябрендә Дим йылғаһында табалар. Был ваҡиғаны бәйән иткән оҙон-оҙаҡ буталсыҡ документтарҙан, протоколдарҙан шул асыҡлана: сәйер рәүештә ҡунаҡҡа саҡырылып, төн уртаһында унан сығып китеп, Дим аша кәмә менән сыҡҡанда (күпер булыуға ҡарамаҫтан) бөтөнләй айыҡ кеше («... что он был трезвый в жизни»[21]) батып үлә (һыуҙа балыҡтай йөҙгән кеше), йәнәһе.

Йәнә архив материалдарынан шул асыҡланды: ул саҡтағы йәмәғәт тәртиптәренә ҡарамай, Ш.Ноғайбәков кантон был хәлде белеп, закон буйынса Земский судҡа әшкәртергә тейеш булып та, полицияға хәбәр итмәй, йәһәт кенә мәйетте ер ҡуйынына һалырға рөхсәт бирә[22]. Танышыусыны, хөкөмдарҙың уйын бутар өсөн ҡаршылыҡлы мәғлүмәт биргән, хәҡиҡәтте йәшергән рәсми кешеләрҙең был фажиғәгә мөнәсәбәттәрен, алдап аҡланыуҙарын уҡыу бик ауыр... Әйүп Ҡайыповтың үлеүе түгел, үлтерелеүе тураһында ла бик асыҡ аңлашыла.

1835 йылдың 4 ноябрендә Ырымбур хәрби губернаторы генерал-адъютант Перовскийға башҡорт-мишәр ғәскәре башлығы генерал-майор Циолковский Әйүп Ҡайыповтың нахаҡҡа рәнйетелеүе, старшиналыҡ дәрәжәһенең ҡайтарылыуы, уның ифрат ырыҫлы кеше булыуы хаҡында һәм «не был замечен ни в малейшем проступке и жизнь ведет отлично — хорошую» тип рапорт бирә[23], ә 1835 йылдың 18 ноябрендә О.Л. Дебу «делает распоряжение в определении в должность юртового старшины»[24]. Власть ғәли йәнәптәре ул яҡшы кешенең гүр эйәһе икәнен дә белмәй әле һаман! Нахаҡ менән хаҡ араһындағы алты йылға һуҙылған бәхәс, ил батыры үҙенең бахыр түгел икәнен иҫбат итергә йәнтәслимгә килгән, намыҫҡа

тейгән көрәш шулай тамам була... Ике йыл яуҙа йөрөп быуын-быуындарға етер дан йыйған, исеме саф йөрөр Әйүп батыр үҙ илендә үҙенең хаҡлығын алты йыл буйы иҫбат итә алмай был донъянан китә...

Рәнйеп киткәндәр ҡарғыш ебәрә, йәндәре илай ти. Инде лә беҙгә тереләргә хәҡиҡәтте хаҡ итеү фарыз. Бер нисә баҫмала яңылыш «Ҡайын» булып киткән исем[25] төҙәтелергә тейеш. Йәйыҡһыбы бабаның һигеҙ улы һигеҙ ауыл булып ултырған тигән тарих тыуған гәзиз ерҙең, һәр аршын ер-тупраҡтың исемле, хужалы булыуына мәңгелек тамға булырға тейеш. «Йәйыҡһыбы нәселнәсәпле, заманында бик абруйлы кеше булған. Уның уландары ғына һигеҙгә еткән: Ҡармыш, Сураҡай, Сурай, Әлшәй, Ташлы, Аҡколай, Ҡайып, Дәртөйлө. Йәйыҡһыбы ҡарттың һигеҙ улына һигеҙ ауыл булған»[26]. Рәсми документтарҙа ауылдың Сәпәш тигән исеме ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? «Ауылым ҡарты Ғәйнулла Исмәғилев (1886-1961 йй.) сөйләүенсә, Салауат яуы баҫылғас, урыҫтар бөтә башҡорт ауылдарын ҡалын дәфтәргә яҙып ала башлаған. Ҡайып ҡарт Баянов (Әйүп Ҡайыпов — Р.С.) был эште хәйләкәр, йылғыр ғына үткер кешегә ҡушҡан. Урыҫлар араһында мах бирмәҫ тип, Сәпәш исемле кешене ебәргән. Сәпәш иһә, Ҡайып урынына үҙ исемен яҙҙырған да ҡуйған. Был хәл ауыл халҡына оҡшамаған, юллап ҡараһалар ҙа, урыҫтар ауыл исемен үҙгәртмәгән. Ауылда ығы-зығы булып бөткән, Сәпәштең нәҫелдәре, уларға эйәргәндәр ауылдан айырылып сығып киткәндәр. Дим аръяғындағы урмандар уларҙыҡы булмағас, утынһыҙ тороп ҡалғандыр, тиҙҙән Мүклеҡайын күле яғына күсенгәндәр. Йылға буйында йәшәп өйрәнгән халыҡ ауылды кире Дим буйына күсергән (ул ауыл әле лә шунда тора). Ошо ауылға Сәпәш ҡарттың нәҫелдәре Яңы Сәпәш (Новосепяшево) исемен ҡуша. Ә төп ауыл Иҫке Ҡайып булып ҡалған. Әммә төп халыҡ яңы ауылды Яңы Ҡайып тип йөрөтә башлай»[27]. Бына шулай, халыҡ үҙ Улының исемен юйырға бирмәй һаман.

Инде барыһын йөпләп әйтер оло һүҙем. Мәҡәләмде мин үҙем тыуған ауылымдың да, Әйүп Ҡайыповтың яҡты хәтерен һаҡлап та, киләсәк быуын балалары күңелен уйлап та яҙҙым. «Ҡулъяҙмалар янмай» тигән хәҡиҡәт «Исемдәр юғалмай» тигән фекерҙә лә дауам итә. Исем юғалһа — эйәһе лә, тимәк, ауыл да юғала тигән һүҙ. Быға хәҙерге көндә миҫалдар бик күп. Башҡорт атамаларын руссалатып әҙәм танымаҫ хәлгә еткереү, мыҫҡылланған тәржемәләр, буштан-бушҡа ҡушылған ауыл, урам, ҡала исемдәре иҫәпһеҙ... Әлшәй исеме лә Раевка менән йотолоп бара.

1812—1814 йылғы Ватан һуғышында Рәсәйҙе яҡлап баш һалған башҡорт һуғышсылары, батырҙары, Ил данлаған уҙамандарының йәндәренә бер изге доға булыр — исемдәрен ҡәҙерләйек, ҡайтарайыҡ.

Мәшһүр мең ырыуы батыры, дворян, кавалер Әйүп Ҡайыпов 2-се Башҡорт полкы сафында Свислочь[28], Бреславль[29], Лейпциг[30], Дрезден[31] ҡалаларын алған. Францияның баш ҡалаһы Парижды алғас «За взятие Парижа 19 марта 1814 года» һәм «В память о войне 1812—1814 гг.» тигән көмөш миҙалдар менән бүләкләнгән[32], Кобрин ҡалаһын алғанда иҫ китмәле батырлыҡ күрһәткәне өсөн Император Александр I тарафынан IV дәрәжәле Изге Анна ордены кавалеры тип танылған[33] Әйүп Ҡайыпов исеме данлы есеменә тап килеп, халыҡ хәтере, ололоҡлауының түрендә булырға тейеш! Шулай булғас, Ватан һуғышының 190 йылы айҡанлы бик сауаплы эш булыр ине, әгәр:

1) «Яңы Ҡайып», «Ҡайып» тигән тарихи исемдәрҙе рәсмиләштерһәк;
2) Ҡайып мәктәбенә 2-се Башҡорт полкы яугире, подпоручик, Изге Анна ордены кавалеры Әйүп Ҡайыпов исемен бирһәк;
3) Әлшәй район үҙәгенең төп урамдарының береһенә Әйүп Ҡайыпов исемен ҡушһаҡ.

Был мәҡәләне уҡыған уҡыусыма һәм ауылдаштарыма шуны әйтер инем. Кемделер фаш итеү, ғәйепләү йәки данлау, маҡтау ниәтенән яҙманым. Ауылымдың ысын исемен, тимәк, батыр исемен, мин

яҡламаһам кем яҡлар тинем. Ә бит, боронғо ышаныу буйынса, батырҙары тураһында күберәк һөйләгән һайын уларҙың әруахтары үҙ илен ҡурсалай, һаҡлай ти...

Ғәзиз, ҡәҙерле милли терәктәрҙе (ил, ер-һыу, батыр исеме, тел, дин) ҡәҙерләп һаҡлай белмәһәк, беҙҙең үҙебеҙҙе лә бер кем аямаҫ, балаларға ла аҡ йәймәләр йәйелеп тормаҫ.

Был мәҡәләлә күтәрелеп сыҡҡан ифрат көнүҙәк мәсьәләне хәл итеү ҡатмарлы эш. Уны бер кеше генә атҡарып сығыр эмәл юҡ. Шуға мин илем тип, ерем тип намыҫланып йөрөгән кешеләрҙең, ауылдаштарымдың, шулай уҡ хөрмәтле вәкәләтле яҡташтарым — шағир, филология фәндәре докторы Рәшит Шәкүрҙең, шағирә, Законлар сығарыу палатаһы депутаты Гөлфиә Юнысованың, Вәкилдәр палатаһы депутаты Рәйес Һәүбәновтың эшлекле, йәһәт ҡатнашлығына ҙур өмөттәмен.

Әйткәндәй, Әйүп Ҡайыповтың Ҡорманғол исемле улынан тыуған ейәненең исеме — Һәүбән (1849). Ә минең инәйемдең атаһының исеме — Әйүп. «Бик аҡыллы кешенең исемен миңә ҡалдырғандар», — тип һөйләгән минең инәйемә ҡартатайым Әйүп. Бына күпме тамыр.

Бик ҙур рәхмәтем һәм ихтирамым Барис ағай Сәғитовҡа. Тоғро һүҙле, тәрән фекер, зиһен эйәһе, офицер Барис Ғиниәтулла улы ла минең ауылдашым. Архив материалдарын байҡап, барлап табып биргән яҡташым үҙ тарихына, үҙ тамырҙарының сәләмәт булыуына атайҙарса яуаплы булған ҡорос рухлы кеше. Ул мине илһамландырҙы был изге эшкә.

Барис ағай үҙе Яңы Ҡайып ауылынан 1947 йылда уҡ сығып киткән. Үҙе юрматы башҡорто есаул Аллабирҙе Аҫылморат (1766—1832) нәҫеленән. Әммә инәйем Яңы Ҡайып ҡыҙы, үҙем дә ошо ауылымда тыуғанмын, тип яҙа ул. Был ир уҙаманында илһөйәрлектең оло өлгөһө йәшәй.

Инде лә ир-уҙамандарыбыҙҙың, тыуған Әлшәйем еренән француз яуына барып, арыҫландай алышып, иҫән-һау ҡайтҡан, 1836—1839 йыл иҫәбенә ингән батыр яҡташтарымдың исем-шәрифтәрен күрһәтәм.

Мәғлүмәттәр алыныу сығанағы: 2-се полк буйынса: ЦГИА РБ,И. 2, оп.1. Д 14605, 14, 609; Д 3727,

| Полк | Яугирҙәрҙең исем-шәрифтәре | Наградалар | | Ауылдар исеме |
|---|---|---|---|---|
| | | Орден | Миҙалдар ”За взятие Парижа”, ”В память о войне 1812 г”. | |
| 2-се | Подпоручик Әйүп Ҡайыпов | Изге Анна IV ст. | 2 миҙал | Сәпәш (Ҡайып) |
| 2-се | Ҡотлозаман Ишкилдин | | В память... | Сәпәш (Ҡайып) |
| 4-се | Дәүләкән Байсаров | | В память... | Сәпәш (Ҡайып) |
| 13-сө | Зауряд*- сотник Ильяс Юлдашев | | 2 миҙал | Әлшәй |
| 12-се | Рамаҙан Ҡаҙыбәков | | 2 миҙал | Әлшәй |
| 13-сө | Зауряд-есаул** Күҙәмеш Яҡшығолов | | 2 миҙал | Сураҡай |
| 12-се | Зауряд-сотник Теләүкәй Килмөхәмәтов | | В память... | Ибрай |
| 13-сө | Зауряд-сотник Яхъя Килдеғолов | | 2 миҙал | Ҡыпсаҡ-Асҡар |
| 2-се | Зауряд-хорунжий Күсәрбай Ҡотоев | | 2 миҙал | Аҡҡолай |
| 13-сө | Зауряд-хорунжий Юлдаш Рәхмәтуллин | | В память... | Ҡыпсаҡ-Асҡар |
| 13-сө | Урядник Дәүләтша Игеҙәков | | В память... | Ҡыпсаҡ-Асҡар |
| 2-се | Муҡай Сапҡынов | | 2 миҙал | Ҡыпсаҡ-Асҡар |
| 2-се | Ғайса Әхмәтов | | 2 миҙал | Ҡыпсаҡ-Асҡар |
| 13-сө | Амангилде Иҫәргәнов | | В память... | Туҡтар |
| 13-сө | Ҡотлогилде Тумин | | 2 миҙал | Туҡтар |
| 2-се | Заряд-хорунжий Ғәбит Вәлитов | | 2 миҙал | Тәүәтәй |
| 12-се | Заряд-сотник Юлдаш Дәүләтов | | 2 миҙал | Тәүәтәй |
| 13-сө | Йомағужа Ҡотлоғошов | | 2 миҙал | Балғажы |
| 4-се | Ҡотлозаман Ҡотлоғәзәмов | | В память... | Сәпәш |
| 13-сө | Есаул Ниғмәтулла Ғөбәйҙуллин | | 2 миҙал | Әбдрәшит |

*Зауряд — боронғо рус теленән: исполняющий обязанности. Зауряд чины губернаторҙарға бирелгән. Улар офицер вазифаһын башҡара, тик офицер чинында түгелдәр.

**Есаул — төрки теленән: ясауыл — баш, етәксе, казак ғәскәрендә чин һәм вазифа.

4023. 12-се полк — Д 3727, 4023, 14609. 13-сө полк — Д 3724, 14609. 14-се полк — Д 4023, 14605.

Минең бер ҡобайырымда ошондай юлдар бар:

Мең һигеҙ йөҙ ун икелә
Уҡ-һаҙаҡтай ир инең.
Илем тиеп, Рәсәй тиеп,
Утҡа, һыуға кер инең,
Үҙең үлеп, данын ҡайтып:
Данлы башҡорт гәскәре
Ил эсендә бер, тинең!
Рәсәй тигән батшалыҡ
Таянған Ил — беҙ, тинең,
Атҡан уҡтай тәҙ инең,
Һай, Ир инең!..
Атҡан уҡтай тәҙ инең,
Берең өсөн берең үлеп,
Бер һаҙаҡҡа теҙгән уҡтай,
Торған Ир ул һин инең,
Һай, Ир инең!..

Изге әруахтарыбыҙға, батырҙарыбыҙға аяттар бағышлайыҡ... Ырыу ағасының тамырын, олондарын беләбеҙ, шәжәрәләребеҙҙең яңы тармаҡтарын үҙебеҙ төҙөйөк.

Рәсәй халҡының ғына түгел, француз, немец халҡы хәтерендә лә башҡорт үҙен ғорур ҙа, сая ла, ҡыраҡай ҙа, бөйөк тә тип танытыуы, тарих ташында юйылмаҫ йыр ҡалдырыуы — милли мираҫ. Үҙенең тут алмаҫ ҡылыстай һынлы булыуын раҫлап, башҡорт ошо һуғышта йәнә башҡорт данын яңыртты. «Төньяҡ амурҙары» тигән атама уҡлы мөхәббәт фәрештәләренә тиңләп яу фәрештәләрен атау ул. Йәнен аямай алышҡан, сабып барған ат өҫтөндә килеш мәргән уҡ атҡан, күҙ ҡарашынан осҡон сәсрәгән, оранынан күк күкрәгән башҡорт яугиренә әйтелгән һүҙ ул. Үҙе баҫҡынсы булмай, әммә баҫып алырға килгәндең йәнен аямай торған ер фәрештәләре, яуҙа януарҙай, йырҙа йылғалай, йәргә йәндәй булған башҡортто һағынып, киләсәк быуын улдарыбыҙ милләт данын, милләт исемен күтәрһен тип юрап доғалар уҡыйыҡ, изге эштәрҙе ихлас ҡылайыҡ. Батырҙарҙың исемдәре ергә түгел, йөрәккә ерләнә.

ИҪКӘРМӘЛӘР

[1]ЦГИА РБ. И.2, оп. 1, Д. 4523, л.27, 27 об.
[2] ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д. 4523,№27, 27 об.
[3]ЦГИА, И. 2, оп.1, Д 3279, л.18.
[4]ЦГИА, И. 2, оп.1, Д 3724, 4023, 14605. 12-се — 13-сө полк буйынса ла мәғлүмәттәр шунда уҡ, Д.3724, 4023, 14609.
[5]ЦГИА РБ. И.2, оп. 1, Д. 4523, л. 59-60.
[6]ЦГИА РБ. И.2, оп. 1, Д. 4523, л. 19, 19 об.
[7]ЦГИА РБ. И.2, оп. 1, Д. 4523, л.1.
[8]ЦГИА РБ. И.138, оп.2, Д.514, л.50 об.
[9]ЦГИА РБ. И.138, оп.2, Д.514, л 51,51 об.
[10]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.5, 5 об.
[11]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.10.
[12]Шунда уҡ, л. 10 об.
[13]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.10; л.11; л.10 об.
[14]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.12.
[15]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.12 об. 13.
[16]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.3 об. 4.
[17]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.7 об.7.
[18]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.18, 18 об. 19.
[19]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.20, 20, 21.
[20]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.25, 25 об.
[21]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.25, 25 об.
[22]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.27 об.
[23]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.32, об.
[24]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д.3279, л.33.
[25]Асфандияров А.З. История сел и деревень Башҡортостана. кн. 7. Уфа: Китап, 1997. - 15-се б.
[26]Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Т.2 Төҙ., баш һүҙ авторы Ф.Нәҙершина. Өфө, 1997, -190-сы бит.
[27]1956 йылда Әлшәй районы Ҡайып ауылында Ғәйнулла Исмәғилевтан Барис Сәғитов яҙып алған.
[28]РГВИА, ф. ВУА, Д 3639, л. 3-6.
[29]РГВИА, ф. ВУА, Д 3424, 16-17
[30]Усманов А.Н. Башкирский народ в Отечественной войне 1812 г. - Уфа, 1964. - 84-се б.
[31]Шунда уҡ, 85-се бит.
[32]Асфандияров А.З. Любезные вы мои. Уфа: Китап, 1992. - 29-сы б.
[33]ЦГИА РБ. И.2, оп.1, Д. 4523. №27, 27 об.